*Рәсимә АЛЛАМОРАТОВА,*
*Мораҡ башҡорт гимназияһының*
*директор урынбаҫары,*
*«Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса*
*йыл уҡытыусыһы—2001» конкурсы лауреаты*

# ХЫЯЛҒА ТОҒРОЛОҠ

«Хыялығыҙға хыянат итмәгеҙ!» — тигән бер аҡыл эйәһе. Ябай ғына һүҙҙәр. Ошо ҡанунға тоғро ҡалған, үҙ-үҙенә, хыялына хыянат итмәгән кешеләр генә бәхет ҡошон яулай беләләрҙер ул. Ысынлап та, яҡты хыялдары Мораҡ башҡорт гимназияһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Искәндәрова Гөлфиә Хәсән ҡыҙын бөгөнгө ирешкән үрҙәргә, уңыштарға килтергәндер.

Йыл һайын республикабыҙҙа үткәрелгән «Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса йыл уҡытыусыһы» конкурсында Күгәрсен районы уҡытыусылары актив ҡатнашып килә, һәм әлегә һис һынатҡандары юҡ. Республика конкурсында ҡатнашыу бәхете Мораҡтың 1-се мәктәбенән Фирҙәүес Хәсән ҡыҙы Хәбибуллина, башҡорт гимназияһынан Зилә Мәхмүт ҡыҙы Псәнчина, Рәсимә Миңлеәхмәт ҡыҙы Алламоратова, Гөлфиә Хәсән ҡыҙы Искәндәрова өлөшөнә төшә.

Гөлфиә үҙ коллегалары ышанысын тулыһынса аҡланы — еңеү яулап, лауреат исемен алып ҡайтты. Шулай итеп, Мораҡ гимназияһының өсөнсө уҡытыусыһы республика лауреаты булды.

Гөлфиә Хәсән ҡыҙы гүзәл Һаҡаҫ йылғаһы буйында урынлашҡан Яңауыл ауылында 1963 йылда донъяға килгән. Бәләкәй сағынан уҡ әсәһе көйләгән бишек йырын тыңлап, моңло теленең нескәлектәрен йөрәгенә һеңдерә барған. Ә инде башланғыс синыфҡа уҡырға төшкәс, башҡорт теленә булған һөйөүе тағы ла тәрәнәйә төшә, уның тураһында күберәк белергә тырыша. Туған телде башлап ата-әсәһе өйрәтһә, мәктәптә башҡорт халҡының тел һәм күңел байлығын асыусы ул ваҡыттағы Яңауыл мәктәбе директоры, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Венера Әхмәт ҡыҙы Батталова була. Ул дәрестәрен йәнле, мауыҡтырғыс итеп уҙғара, уҡыусыларға әхлаҡи тәрбиә биреү өсөн һәр мөмкинлекте файҙалана. Венера Әхмәт ҡыҙының дәрестәре кескәй Гөлфиә күңелендә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булыу теләген уята. Шулай итеп, шаулап-гөрләп мәктәп тормошо ла үтеп китеп, Гөлфиә алдында «Ҡайҙа барырға?», «Кем булырға?» тигән һорауҙар килеп баҫа.

— Тегеүсе булырға хыялландым, өс йыл Өфөләге 8 март исемендәге тегеү фабрикаһында эшләнем. Әсәйемә, туғандарыма күңелемә оҡшаған кулдәктәр тегеп кейҙерҙем. Артистка ла булғым килде — институт йылдарында драма түңәрәгенә йөрөп, режиссер һөнәре алып сыҡтым, әле лә сәхнәнән төшмәйем, — ти Гөлфиә Хәсән ҡыҙы.

Бала саҡтан күңеленә оялап алған хыялы — фәҡәт башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булыу ине бит. Ошо теләк уны Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институтының филология факультетына алып килә.

Янып-ярһып йәшәгән талип йылдары ла артта ҡала. 1998 йылда Гөлфиә Хәсән ҡыҙы башҡорт теле һәм әҙәбиәте, рус теле һәм әҙә-

биәте белгесе булып тыуған яғына эшкә ҡайта. Яҙмышы уны 1996 йылда Күгәрсен районы үҙәге Мораҡҡа алып килә. Гимназияла ул үҙ предметын һәм уҡытыу методикаһын яҡшы белгән уҡытыусы булараҡ асылды. Уҡытыуҙың төрлө төрҙәрен, формаларын, техник сараларҙы ҡуллана, дәрестәрен күргәҙмә материалдар менән байыта. Шуның өсөн уның дәрестәре уңышлы үтә, бигерәк тә әҙәбиәт дәрестәре хәтерҙә ныҡ һаҡлана. Гөлфиә Хәсән ҡыҙы һәр дәресте тормош, бала, кеше яҙмышы менән бәйләп алып бара, художестволы һүҙ, алымдар аша характер формалаштыра. Уҡыусыларында белем алыуға ынтылыш, юғары әхлаҡлылыҡ, хеҙмәтте, тыуған ерҙе яратыу хистәре тәрбиәләүгә, халҡыбыҙҙың ғөрөф-ғәҙәттәрен өйрәнеүгә ҙур әһәмиәт бирә һәм дәрестәренә заман һулышы өрөргә, уны ерле материал менән бәйләргә тырыша.

Гөлфиә Хәсән ҡыҙы уҡыусыларҙы ижади эшләргә өйрәтеүҙе үҙ һөнәренең төп маҡсаты итеп һанай. Гимназиябыҙҙа бер генә сара ла Гөлфиәһеҙ үтмәй. Ул төрлө конкурстарҙа еңеү яулаған ҡатын-ҡыҙҙар ансамбле етәксеһе. Бейеү ансамбленең төп бейеүсеһе лә ул. Улар бал бейеүен сәхнәләштереп, 2001 йылда районда призлы урын яуланы. Гөлфиә етәкләгән фольклор ансамбле районда үткәрелгән бөтөн конкурстарҙа ла еңеүсе булып килә. Ә Гөлфиә Хәсән ҡыҙы ҡатнашҡан спектаклдәр һуң! Ниндәй генә ҡыҙыҡлы, мауыҡтырғыс ролдәр башҡарманы ул. Үҫмер ҡыҙҙан алып сал сәсле әсәләр роленә тиклем берҙәй оҫталыҡ менән уйнаны. Ҡыҫҡаһы, йәшлек дәрте менән, янып-ярһып йәшәй беҙҙең Гөлфиәбеҙ. Ул шулай уҡ һөйкөлө әсә лә, уңған, ихтирамлы ҡатын да.

Гөлфиә Хәсән ҡыҙының синыф етәксеһе булараҡ эшләүе күптәргә өлгө булырлыҡ. Уның 6-сы «Г» синыфы һәр яҡтан өлгөлө, талантлы, белемле уҡыусылары менән танылған. Бөтәһе лә районның өлгөлө «Гөрләүек» ансамбле солистары. Улар мәктәптең, районның бөтә мәҙәни сараларында ла әүҙем ҡатнаша, уҡыуҙа ла һынатмайҙар. «Башҡортостан йондоҙсоҡтары», «Һаумы, XXI быуат!», «Сулпылар» конкурстарының призлы урындары ла улар иҫәбендә. Яңы йылда Кремлдәге Шыршы байрамына барыу бәхете лә районнан Гөлфиә Хәсән ҡыҙының уҡыусыһы Хәсәнов Айнур өлөшөнә тейҙе.

Уҡытыусыларын элекке сығарылыш уҡыусылары ла онотмай. Улар юғары һәм махсус уҡыу йорттарында уҡыуҙарын дауам итә. Район олимпиадалары һәм йыр конкурстары еңеүсеһе Фәнил Нуриманов хәҙер Башҡорт дәүләт университетында, Фәйрүзә Ҡаразбаева Башҡорт дәүләт педагогия университетында белем ала. Ә Алламоратова Гөлназ башҡорт һәм рус теле буйынса район олимпиадаларында берәүгә лә ал бирмәй ине. Әле медицина институтында уҡый. Уның Мостай Кәрим ижадына арналған иншалар конкурсында призлы урын яулауында, шиғырҙары һәм мәҡәләләренең «Йәшлек», «Йәншишмә» гәзиттәрендә даими баҫылып тороуында, башҡа уҡыусыларының бөгөнгө уңыштарында, һис шикһеҙ, синыф етәксеһенең хеҙмәте баһалап бөткөһөҙ ҙур.

Гөлфиә Хәсән ҡыҙының бөтә тормошо ижади хеҙмәттә. 2002 йылда Ейәнсура районында үткәрелгән башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының республика конференцияһында «Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә тыуған яҡтың рухи ҡомартҡылары нигеҙендә шәхес тәрбиәләү» тигән тема буйынса доклад менән сығыш яһап, үҙ эшенең бай тәжрибәһе менән ихлас уртаҡлашты.

Әле күптән түгел ҡыуаныслы хәбәр алдыҡ: Гөлфиә Хәсән ҡыҙының уҡытыусылыҡ эшмәкәрлеге иң юғары баһа яуланы — уға «Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы» исеме бирелде.